*Содержательный раздел*
*основной образовательной программы*
*основного общего образования (п.2.1.)*

МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ
Министерство образования и науки Республики Башкортостан
МАОУ "СОШ №29" городского округа г. Стерлитамак РБ

**УТВЕРЖДЕНО**

Приказ № 202
от « 30» 03 2022г.

**РАБОЧАЯ ПРОГРАММА**
**(ID 4666599)**
учебного предмета

# «ЛИТЕРАТУРНОЕ ЧТЕНИЕ НА РОДНОМ (БАШКИРСКОМ) ЯЗЫКЕ»

**НАЧАЛЬНОЕ ОБЩЕЕ ОБРАЗОВАНИЕ**

Рассмотрено на заседании методического объединения
учителей родных языков от « 30» 08 2022г. № __

Составитель: Худайбердина Альфия Альфитовна
учитель башкирского языка и литературы

г. Стерлитамак 2022

АҢЛАТМА ЯҘЫУ

Башланғыс дөйөм белем биреүҙең 1-4 кластары өсөн «Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметының өлгө эш программаһы (артабан – Программа) һәр уҡыу йылына предметтың йөкмәткеһен, уҡытыуҙың төп методик стратегияларын, «Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметы алымдары аша уҡыусыларҙы тәрбиәләү юлдарын билдәләй.

Программаның норматив базаһы:

– Рәсәй Федерацияһының конституцияһы;

– «Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында» Федераль законы (29.12.2012, №273-ФЗ);

– «Рәсәй халыҡтары телдәре тураһында» Рәсәй Федерацияһы законы (үҙгәреш һәм өҫтәлмәләр менән) (25.10.1991 №1807-1);

– Башланғыс дөйөм белем биреүҙең Федераль дәүләт белем биреү стандарттары (Рәсәй Федерацияһының мәғариф министрлығы тарафынан 31.05.2021 раҫланған, № 286);

– Башланғыс дөйөм белем биреүҙең өлгө төп белем биреү программалары (дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡытыу-методик берләшмәһе ҡарары менән раҫланған, протокол № 1/22 18.03.2022);

– Өлгө тәрбиә программалары(дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡытыу-методик берләшмәһе ҡарары менән раҫланған, протокол № 3/22 23.06.2022).

Программа нигеҙендә федераль дәүләт белем биреү стандарттарының методологияһын тәшкил иткән системалы эшмәкәрлек ҡарашы ята.

Программа Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының башланғыс дөйөм белем туған (башҡорт) телендә алып барылған мәғариф ойошмалары өсөн эшләнде, ул шулай уҡ «Туған тел һәм туған телдә әҙәби уҡыу» предмет өлкәһен алып барған уҡытыусыларға методик ярҙам күрһәтеүгә лә йүнәлтелгән.

Программа йөкмәткеһе системалы эшмәкәрлек принцибына ярашлы төҙөлгән һәм федераль дәүләт белем биреү стандарттарының «Туған телдә әҙәби уҡыу»

предмет өлкәһенә ҡаралған башланғыс дөйөм белем биреү программын үҙләтереү һөҙөмтәләренә ирешеүгә йүнәлтелгән.

Программа башҡорт телендә аралашҡан һәм үҙ телен белгән уҡыусылар өсөн төҙөлгән. Дәреслек һәм эш программаһын төҙөүсе авторҙар уҡыу материалының күләмен һәм йөкмәткһен киңәйтә, балаларҙы үҫтереү һәи тәрбиәләүгә булышлыҡ иткән эш төрҙәрен тәҡдим итә ала.

Эш программаһын тормошҡа ашырыуҙа белем биреү ойошмаһы һәр төрлө белем биреү технологияларын, электрон уҡытыу сараларын, дистанцион уҡытыу ресурстарын ҡулланыу хоҡуғына эйә. Шулай уҡ Программаны үҙләштереүҙә модуль принцибы ла ҡулланылырға мөмкин.

Уҡыусыларҙың белемгә ихтыяжын һәм ҡыҙыҡһыныуҙарын ҡәнәғәтләндереү маҡсатында үҙләштерелә торған программа сиктәрендә мәғариф ойошмаларының локаль акттарында ҡаралған тәртиптә индивидуаль уҡыу, шул иҫәптән тиҙләтелгән уҡытыу пландары эшләнеү мөмкинлеге лә күҙ уңында тотола.

Программа йөкмәткеһе дәрестән тыш эшмәкәрлектә лә тормошҡа ашырыла ала: предмет аҙналыҡтары, экскурсиялар, мәктәп кимәлендәге тематик саралар, конкурстар һ.б.

**«Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметына дөйөм характеристика**

Туған әҙәбиәт – тормошто танып-белеүҙең үҙенсәлекле ысулы, төп милли-мәҙәни ҡиммәт һәм донъя мәҙәниәте күренеше, әхлаҡ һәм традицияларҙы һаҡлау һәм тапшырыу сараһы.

Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу – башланғыс класс уҡыусыларын әҙерләү системаһында мөһим предметтарҙың береһе, сөнки ул уҡыусыларҙың донъяны позитив һәм тулайым ҡабул итеүенә, әхлаҡ һәм яуаплы үҙаң тәрбиәләүгә булышлыҡ итә.

Шулай уҡ предмет саралары ярҙамында уҡыусыларҙың функциональ грамоталылығы формалаша. Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу курсын уңышлы үҙләштереү, туған тел, рус теле һәм рус телендә әҙәби уҡыу менән предме-ара бәйләнешен һәм шулай уҡ «Туған (башҡорт) әҙәбиәте (5-9-сы

кластар)» дисциплинаһы менән бәйләнеште иҫәпкә алып, башланғыс белем биреүҙәге башҡа предметтарҙы һөҙөмтәле өйрәнеүгә булышлыҡ итә.

Башланғыс белем биреү кимәлендә туған әҙәбиәтте өйрәнеү динамик уҡыуҙың дөйөм уҡыу күнекмәһен һәм текст, мәғлүмәт менән эшләй белеү һәләтен формалаштыра, шулай уҡыусының күҙәтә, сағыштыра, анализлай, эҙләнеү эштәре процесында уҡыу материалын дөйөмләштерә белеүҙәрендә сағылыш тапҡан психик функцияларын (телмәр, фекерләү, хәтер, иғтибар һ.б.) үҫтерә.

«Туған (башҡорт) теленән әҙәби уҡыу» курсы нигеҙендә башҡорт әҙәбиәтенең милли мәҙәниәттәр өсөн берҙәм ҡиммәттәр системаһы коды булыу идеяһы ята. Әҙәбиәт ул ҡиммәттәрҙе һаҡлау ғына түгел, үҫеп килеүсе быуынға тапшырыу, бала аңында бөгөнгө менән киләсәкте бәйләп тороусы сара ла булып тора.

Уҡыу предметы йөкмәткеһенә башҡорт теленә тәржемә ителгән Рәсәй һәм сит ил әҙәбиәте индерелгән. Улар араһында рус классиктары А.С.Пушкин, Л.Н.Толстой, А.П.Чехов, Н.А.Некрасов һәм билдәле балалар яҙыусылары В.А.Осеева, В.В.Бианки әҫәрҙәре айырым урын алып тора.

Бынан тыш «Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» өлгө программаһының материалы уҡыусыларҙы донъя фольклоры (украин, татар, дағыстан, рус, һинд, япон, халыҡ әкиәттәре); рус әҙәбиәте әҫәрҙәре (М.Пришвин, С.Михалков, П.Синявский, В.Маяковсский һ.б); сит ил әҙәбиәте әҫәрҙәре (Э.Хемингуэй, О.Уайльд, бер туған Гриммдар, Ш.Перро һ.б.) менән таныштырыуға йүнәлтелгән.

Үрҙә һанап үтелгән текстар балаларға граждандлыҡ, патриотик, әхлаҡ, хеҙмәт, экологик тәрбиә биреүҙе маҡсат итеп ҡуя, әҙәбиәтте милли һәм донъяуи мәҙәни күренеш итеп күҙалларға мөмкинлек бирә.

## «Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметының маҡсаты һәм бурыстары

«Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметының маҡсаты – башҡорт телендә дөрөҫ, аңлы, йүгерек һәм тасуири уҡырға өйрәтеү; телмәр эшмәкәрлеген үҫтереү; әхлаҡ нормаларын формалаштырыу һәм туған мәҙәниәтебеҙҙың мөһим өлөшө булған әҙәбиәткә үҙенсәлекле ҡараш тәрбиәләү.

«Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметының бурыстары:

– әҙәби уҡыу материалы аша танып белеү һәләтлектәрен һәм төрлө текстарҙың йөкмәткеһен һәм үҙенсәлектәрн аңлау, баһалау, анализлау;

– тарихи-мәҙәни, әхлаҡ, эстетик ҡиммәттәр сығанағы булған әҙәбиәткә ҡыҙыҡһыныу уятыу;

– башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәрен өйрәнеү нигеҙендә туған (башҡорт) теленең әҙәби-эстетик мөмкинлектәре тураһында белемдәрен тулыландырыу;

– телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен дә үҫтереү, уҡылған әҫәрҙәр темаһы буйынса телдән һәм яҙма фекерҙәр формалаштырыу тәжрибәһе булдырыу.

**«Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметының өлгө программаһының төп йөкмәтке һыҙығы**

Программала уҡыу предметының йөкмәткеһе түбәндәге бүлектәрҙән тора: «Мин уҡый beләм!» (1-се ласс), «Уҡы, уйла, фекерлә!» (2-се класс), «Белем көнө» (3-сө класс), «Мәктәбем – тыуған йортом» (4-се класс). Был бүлектәргә башҡорт классиктарының һәм заман яҙыусыларының әҫәрҙәре индерелгән.

Балаларҙа граждандлыҡ һәм патриот сифаттары тәрбиәләүгә булышлыҡ иткән әҫәрҙәргә айырым урын бирелгән. Бындай әҫәрҙәр «Күңел матурлығы һәм матур ғәҙәттәр иленә сәйәхәт» (1-се класс), «Тыуған ерем, тыуған йортом – күңелем нуры» (2-се класс), «Минең йортом, минең илем, минең халҡым – минең киләсәгем» (3-сө класс), «Тыуған илеңдең тарихын бел!» (4-се класс) бүлектәрендә бирелгән. Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе Тыуған ил, тыуған ер, тыуған ер байлығы, ата-бабаларыбыҙ мираҫы һ.б. төшөнсәләрен аса. Шулай итеп, Программала әҙәби әҫәрҙәрҙе һайлап алыуҙың төп принцибы текстарҙың Тыуған илгә һөйөү һәм уның байлығына һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү йүнәлешле булыуы тора.

Әхлаҡ сифаттарын формалаштырыуға ла Программала ҙур иғтибар бирелә. Бындай йүнәлешле текстар «Әҙәп төбө – матур ғәҙәт» (2-се класс), «Башҡарған эштәр һүҙҙәргә ҡарағанда күберәк һөйләй» (3-сө класс), «Дуҫлыҡтың ҡәҙерен бел!» (4-се класс) бүлектәрендә урын алған. Улар балаларҙы кешенең эске донъяһын таный белергә ҡыҙыҡһындыра, тормош ҡиммәттәре һәм тиҫтерҙәре

менән аралашыуҙа мораль-әхлаҡ ҡағиҙәләре тураһында уйланырға мәжбүр итә. Әҫәрҙәр балаларҙың йәш үҙенсәлектәренә тап килерлек, уларҙың психологик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып һайланған.

Балаларҙа сәләмәт тормошҡа ҡарата ыңғай ҡараш формалаштырған һәм хеҙмәт тәрбиәһен сағылдырған «Әсәйҙәр һәм кескәйҙәр» (1-се класс), «Байлыҡ, муллыҡ, именлек – ныҡыш хеҙмәт емеше» (2-се класс), «Кешене хеҙмәт биҙәй» (4-се класс) бүлектәренә индерелгән әҫәрҙәр мөһим урын биләй.

Программаға индерелгән әҫәр геройҙарының күбеһе – кесе йәштәге мәктәп балаларының тиҫтерҙәре, улар ҡабул итеү аша уҡыусылар үҙҙәре өсөн мотлаҡ булған мәҙәни-тарихи төшөнсәләрҙе аса, үҙләштерә. Шулай уҡ Программала балалыҡ донъяһын төрлө дәүерҙәрҙә асҡан, уларҙың үҫеш юлын, характеры сыныҡыуҙы һәм әхлаҡ йүнәлештәре формалаштырыуҙы күрһәткән әҫәрҙәр индерелгән. Һайлап алынған әҫәрҙәр балаларға тиҫтерҙәре күҙлегенән башҡорт әҙәбиәтен төрлө тарихи дәүерҙәрҙә үҙләштерергә мөмкинлек бирә. Бынан тыш, Программала хәҙерге әҙәбиәт әҫәрҙәренә лә ярайһы урын бирелгән, был әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе заман балаларына яҡын һәм аңлайышлы.

Региондың милли-мәҙәни үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, уҡытыусылар яҡташ яҙыусыларының әҫәрҙәрен дә индерә ала.

**«Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметының уҡыу планындағы урыны**

Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы рәүештә «Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметы «Туған тел һәм туған телдә әҙәби уҡыу» предмет өлкәһенә инә һәм мотлаҡ өйрәнелергә тейеш предмет булып иҫәпләнә.

Системалы курс буларак, туған (башҡорт) телдә әҙәби уҡыу 1-се класта, «Әлифба» дәреслеге буйынса «Грамотаға өйрәтеү» курсы тамамланғас, башлана.

Уҡытыу башҡорт телендә алып барылған белем биреү ойошмаларында предметты өйрәнеүгә 1-се класта – 17 сәғәт (аҙнаға 1 сәғәттән 17 аҙна), 2-се класта

– 34 сәғәт (аҙнаға 1 сәғәттән 34 аҙна), 3-сө класта – 34 сәғәт (аҙнаға 1 сәғәттән 34 аҙна), 4-се класта 34 сәғәт (аҙнаға 1 сәғәттән 34 аҙна) бирелә.

Шулай итеп, дүрт йыл өйрәнеүгә 1-4 –се кластарҙа дөйөм сәғәттәр һаны 119 сәғәт тәшкил итә.

## «ТУҒАН (БАШҠОРТ) ТЕЛЕНДӘ ӘҘӘБИ УҠЫУ» УҠЫУ ПРЕДМЕТЫНЫҢ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

### 1-се класс

**1-се бүлек «Мин уҡый беләм»**

Д. Талхина. «Китап» шиғыры. М. Дилмөхәмәтов. «Белгем килә!». Н. Грахов. «Ни өсөн?». Ш. Бабич. «Әй, китап!». Художестволы әҫәр. Жанр. Шиғри әҫәр. Уның темаһы һәм исеме. Төп фекер. Шиғыр юлдары. Дүрт юллыҡтар. Китап - белем, мәғлүмәт алыу, уҡыусының шәхесен үҫтереү сығанағы.

**2-се бүлек «Әкиәт уҡырға яратам»**

«Шалҡан» рус халыҡ әкиәте (К. Иванов тәржемәһе). Ж.Кейекбаев. «Айыу ниңә ҡойроҡһоҙ» әкиәте. «Башаҡ» украин халыҡ әкиәте (А. Йәғәфәрова тәржемәһе). Л. Толстой. «Тейен менән бүре» әкиәте (Ш.Насиров тәржемәһе).

Әкиәт әҙәби жанр булараҡ ҡабул ителә. Уның темаһы (исеме). Халыҡ әкиәте төрөн билдәләү (хайуандар тураһында, көнкүреш, тылсымлы). Әҫәр геройҙары (ыңғай, кире). Уларҙың ҡылыҡтарын баһалау. Әкиәттең төп фекере.

**3-сө бүлек «Атай – ғаилә башлығы»**

Ф. Сынбулатова. «Атай – ғаилә башлығы» хикәйәһе. Р. Хәйри. «Атай менән һөйләшеү» хикәйәһе. Л. Толстой. «Атай менән улдар» хикәйәһе (Ш.Насиров тәржемәһе). Башҡорт халыҡ әкиәте «Кем байыраҡ?»

Хикәйә әҙәби жанр булараҡ бирелә. Текстың йөкмәткеһе. Хикәйәнең мәғәнәүи өлөштәре. Абзац. Абзацтың төп фекере. Әкиәттең исеме. Әҫәр

йөкмәткеһенең төп фекерен асҡан төп һүҙҙәр. Әҫәргә иллюстрациялар. Геройҙар, уларҙың ҡылыҡтары. Әҫәрҙең тәрбиәүи әһәмиәте. Атай – ғаилә башлығы, туйындырыусы. Ғаилә ҡиммәттәренә ихтирам тәрбиәләү.

**4-се бүлек «Әсәйҙәр һәм кескәйҙә»**

Л. Толстой. «Иң-иң матуры» (Ш.Насиров тәржемәһе) хикәйәһе. Н. Иҫәнбәт. «Иң матур һүҙ» шиғыры. Татар халыҡ әкиәте «Өс ҡыҙ». Ф. Ғөбәйҙуллина. «Минең әсәйем кем?». В. Осеева. «Улдар» хикәйәһе (тәржемәсеһе билдәһеҙ). Е. Пермяк. «Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ» әкиәте (М. Игебаева тәржемәһе).

Бүлектең төп темалары - әсәнең үҙ балаһына һөйөүе һәм баланың әсәһенә һөйөүе. Әҫәр башының мәғәнәһе. Һөйләмдәр, текст мәғәнәһе һалынған текст фрагменты. Әҫәр геройҙары.

**5-се бүлек «Күңел һәм ҡылыҡтар матурлығы иленә сәйәхәт»**

Н. Игеҙйәнова. «Бәхәс» хикәйәһе. Р. Ниғмәтуллин. «Тәрбиәһеҙ өйрәк бәпкәһе» әкиәте. Б. Байым. «Аҡ таҫмалы ҡыҙ» хикәйәһе.

Тыуған яҡ тәбиғәтенең матурлығын, тирә-яҡ мөхит күренештәрен тасуирлаусы, шулай уҡ кешелек мөнәсәбәттәренең, ҡылыҡтарының матурлығын һүрәтләүсе хикәйәләр. Кешенең тышҡы һәм эске матурлығы. Аҡылы, ҡылығы һәм тышҡы ҡиәфәте - кешенең эске һәм тышҡы матурлығы индикаторҙары. Тема һәм текстың төп фекере. Әҫәрҙең авторы һәм геройы. Авторҙың геройға мөнәсәбәте. Уҡыусыларҙың геройға мөнәсәбәте.

## 2-се класс

**1-се бүлек «Уҡы, уйлан, фекер йөрөт!»**

Ф. Туғыҙбаева. «Мин - уҡыусы» шиғыры. М. Ғәли. «Уҡы, эшлә, аҡыл йый». З. Күскилдина «Ҡанатһыҙ турғай» әкиәте.

Әҫәр. Шиғри әҫәрҙең исеме. Шиғри әҫәрҙең (рифма, ритм) үҙенсәлектәре. Әкиәт, уның сюжет һыҙаттары. Әкиәт мәғәнәһе. Китап - белем, мәғлүмәт алыу сығанағы.

**2-се бүлек «Халыҡ ижады ынйылары»**

Бишек йырҙары. Б. Исҡужин. «Әшкәк-бәшкәк» халыҡ уйыны. «Аҡ

тирәк, күк тирәк» халыҡ уйыны. Бармаҡ уйындары. Таҡмаҡтар.

Фольклорҙың бәләкәй жанрҙары: бишек йырҙары, таҡмаҡтар, халыҡ уйындары. Бәләкәй фольклор жанрындағы әҫәрҙәрҙең уйы. Әҫәрҙең сюжет йөкмәткеһе. Халыҡ ижадының тәғәйенләнеше һәм уның тәрбиәүи әһәмиәте

**3-сө бүлек «Әкиәт уҡырға яратам!»**

Башҡорт халыҡ әкиәте «Төлкө менән әтәс». Дағыстан халыҡ әкиәте «Батыр малай» (А. Йәғәфәрова тәржемәһе). М. Пришвин. «Аҡ муйынсаҡ» хикәйәһе (тәржемәсеһе билдәһеҙ). С. Михалков. «Һөҙөшкөм килә» хикәйәһе (Ш. Бикҡол тәржемәһе). «Төлкө менән кәзә тәкәһе» рус халыҡ әкиәте (А. Йәғәфәрова тәржемәһе).

Тема һәм әкиәт геройҙары. Текс738тың мәғәнәи өлөштәре. Һәр бүлектең башы, төп өлөшө, аҙағы, үҙенсәлектәре. Мәғәнәүи өлөштәрҙең микротемалары. Ваҡиға урыны, ваҡыты, тирә-яҡ мөхит.

**4-се бүлек «Яраткан шиғырҙарым»**

Ф. Туғыҙбаева. «Әсәйем ҡулдары» шиғыры. А. Игебаев. «Өйрәнгән ул әҙергә», «Тыуған яҡ» шиғырҙарын тыңларға мөмкин. Д. Талхина. «Йәй» шиғыры. Ф. Туғыҙбаева. «Балыҡсы Айуған бабай» хикәйәһе. «Бесәйҙең өйө яна» рус халыҡ әкиәте (А. Йәғәфәрова тәржемәһе). «Һайыҫҡан бутҡа бишергән» емеше (тәржемәсеһе билдәһеҙ).

Шиғри әҫәрҙең (рифма, ритм) үҙенсәлектәрен ҡабатлау. Геройҙың портретын, ҡылыҡтарын, авторҙың геройға мөнәсәбәтен һәм уҡыусының геройға мөнәсәбәтен сағылдырған һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр.

**«Башҡорт халыҡ ижады ынйылары» проект эше.**

**5-се бүлек «Тәбиғәт – беҙҙең матурлығыбыҙ һәм байлығыбыҙ»**

А. Йәғәфәрова. «Сәнскеле күлдәк» әкиәте. Н. Игеҙйәнова. «Тирәк» хикәйәһе.

Терәк һүҙҙәр буйынса геройҙарҙы асыҡлау. Әҙәби әкиәттәр. Әкиәт төрөн һәм темаһын билдәләү.

6-сы бүлек «**Әҙәп төбө – матур ғәҙәт»**

Ф. Иҫәнғолов. «Флүрәнең ғәйебе нимәлә?», «Ҡыҙҙар менән уйнарға

яраймы?», «Ғәбиттең сере нимәлә?». С. Яҡупов. «Кем маҡтансыҡ?». А. Йәғәфәрова. «Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар» хикәйәһе. А. Толстой. «Ҡандала» хикәйәһе (тәржемәсеһе билдәһеҙ). Ж.Кейекбаев. «Оморҙаҡ бабай» хикәйәһе.

Тексттың сюжетлы төҙөлөшө. Сюжет үҫеше (ғәмәлдәрҙең башланыуы, төп әһәмиәтле эштәрҙе башҡарыу, ваҡиғаларҙың тамамланыуы; ваҡиғаларҙың ваҡыты һәм урыны). Төп һүҙҙәр төп йөкмәткене сағылдыра. Тексты ҡайтанан һөйләү планы. Ҡыҫҡаса һөйләү. Ролдәр буйынса уҡыу өсөн фрагмент. Ролдәр буйынса уҡыу өсөн тасуирлау саралары (темп, интонация). Әҫәрҙең тәрбиәүи һәм үҫтереүсе әһәмиәте.

**7-се бүлек «Тыуған йортом, тыуған ерем – күңел нурым»**

Ғ.Ғәлиева. «Мин йәшәйем Уралда» шиғыры. Р. Янбулатова. «Баш ҡала шундай матур» шиғыры. З. Күскилдина. «Өй туйы» хикәйәһе. А. Вәхитова. «Алмағастар ултыртабыҙ» хикәйәһе. В. Исхаҡов. «Үгәй инә үләне», «Бәпембә» шиғырҙары. Синявский П. «Йәшел аптека» шиғыры (тәржемәсеһе билдәһеҙ).

Сюжеттың айырмалығы һәм оҡшашлығы, әҫәрҙәрҙең тематикаһы. Әҫәрҙең икенсе дәрәжәләге персонаждары. Геройҙың портреты. Геройҙың ҡылыҡтарын баһалау. Авторҙың, уҡыусының һәм уҡытыусының әҫәр геройына мөнәсәбәте. Әҫәрҙең тасуирлау теле – тасуирлама. Милли үҙенсәлекле һүрәтләүҙәр.

**8-се бүлек «Байлыҡ, муллыҡ, именлек – ныҡыш хеҙмәт емеше»**

Н. Игеҙйәнова. «Янғын» хикәйәһе. Р. Ниғмәтуллин. « Рәхмәттәр биргән рәхәт» шиғыры. Г. Яҡупова. «Ярғанат» хикәйәһе. (Г. Ситдиҡова). «Сер» хикәйәһе.

Әҫәрҙең мәғәнәүи өлөштәренең сәбәп-тикшереү бәйләнеше. Һәр мәғәнә өлөшөнөң терәк, төп һүҙҙәре һәм һүрәттәре. Һәр мәғәнә өлөшөнөң темаһы. Тексттың ҡыҫҡаса йөкмәтке планы. Тексттың ҡыҫҡаса йөкмәткеһе. Яҙыусылар кешенең тормошонда (уңышында) хеҙмәттең әһәмиәте тураһында.

**«Башҡорт яҙыусылары тыуған яҡ хаҡында» проект эше.**

**3-сө класс**

**1-се бүлек «Белем көнө»**

С. Әлибаев. «Беҙ өсөнсөгә күстек» шиғыры. М. Кәрим. «Уҡытыусыма» шиғыры.

Шиғри әҫәрҙең (ритм, рифма, рифм төрҙәре) үҙенсәлектәрен ҡабатлау. Шиғырҙар тематикаһы. Төп фекер (ҡабатлау).

Китап - белем, мәғлүмәт алыу сығанағы.

Каникулдар тураһында ҡыҫҡаса хикәйәләү монологик фекерҙәр формаһындағы тәьҫораттары. Белем алыуға ҡыҙыҡһыныу. Шәхси мәғәнәһе.

**2-се бүлек «Көҙ ҡояшы йөҙә зәңгәр күктә»**

М. Кәрим. «Көҙ» шиғыры. Р. Бикбаев. «Көҙ» шиғыры. А. Игебаев. «Сентябрь» шиғыры. Ж.Кейекбаев. «Һунарсы мажаралары» хикәйәһе. Д. Талхина. «Дуҫтар көҙ ҡаршылай» хикәйәһе. Кинйәбулатова. «Көҙ еткәс» шиғыры. А. Игебаев. «Ишетәм» шиғырын. М. Ғәлиев. «Ҡоштарҙың йыйылышы» әкиәте.

Әҫәр сюжетының уйы. Хикәйәләрҙең сюжет һыҙаттары. Авторлыҡ позицияһы. Гәзит уҡыусының ҡарашы. Һүрәтләү саралары: сағыштырыу, кәүҙәләндереү. Тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

3-сө бүлек «Башҡарған эштәр һүҙҙәргә ҡарағанда күберәк һөйләй»

Р. Ханнанов. «Тартай теленән таба», «Кешегә соҡор ҡаҙһаң, үҙең төшөрһөң» хикәйәләре. Ҡ. Даян. «Өҙөлгән сәскәләр» хикәйәһе. Р. Солтангәрәев. «Кем алданды?» Н. Игеҙйәнова. «Аҡтырнаҡ» хикәйәһе.

Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе. Авторлыҡ позицияһы (ҡабатлау). Геройҙарҙың ҡылыҡтарын анализлау. Балала ҡиммәт ориентирҙары формалаштырыу.

**4-се бүлек «Рус әҙәбиәте»**

М. Пришвин. «Балалар һәм өйрәктәр» хикәйәһе (тәржемәсеһе билдәһеҙ). Н. Некрасов. «Мазай бабай менән ҡуяндар» хикәйәһе (Ғ. Әмири тәржемәһе). А. Пушкин. «Салтан батша хаҡында әкиәт» (өҙөк) (Ю. Гәрәй тәржемәһе). В. Маяковский. «Кем булырға?» (тәржемәсеһе билдәһеҙ).

«Балалар һәм өйрәктәр», «Мазай бабай менән ҡуяндар» әҫәрҙәренең дөйөм тематикаһы. Тереклеккә һаҡсыл мөнәсәбәт. Шиғыр-монолог. Геройҙың һөнәрҙәр тураһында шиғыр фекерҙәре. Әҙәби әкиәт. Шиғырҙарҙағы әкиәт. Шиғырҙарҙағы әкиәттәр рифмаһының үҙенсәлектәре.

**«Бөтә һөнәрҙәр ҙә мөһим» (һорау: ниндәй һөнәр һайларға?) проект эше.**

**5-се бүлек «Тәңкә-тәңкә ҡарҙар яуа...»**

Н. Нәжми. «Ҡыш» шиғыры. Ш. Бабич. «Ҡышҡы юлда» шиғыры. М. Садиҡова. «Һунарға барғанда» хикәйәһе. Р. Хәйри. «Йәйәүле буран» шиғыры. Ш. Бикҡол. «Урман ситендә» хикәйәһе. Г. Шафиҡова. «Ҡыш ниңә ҡырыҫ холоҡло?»

Һынлы-һүрәтләү тел сараларының ҡабатланыуы: сағыштырыу, тасуирлау, һынландырыу. Пейзаж. Авторҙың һүҙҙәрен файҙаланып геройҙарҙы тасуирлау. «Башҡортостанда ҡыш» темаһына диалог, балаларҙың ҡышҡы уйындары, ҡышҡы байрамдар. Тәбиғәтте һүрәтләү, ҡоштарҙың һәм хайуандарҙың ҡышҡы тормошо. Башҡорт халҡының боронғо кәсебе - һунар тураһында мәғлүмәт. Әҫәрҙе, геройҙарҙы авторҙар һәм уҡыусы күҙлегенән анализлау.

**6-сы бүлек «Йортом, илем, халҡым, киләсәгем»**

Н. Нәжми. «Ватан» шиғыры. Р. Хәйри. «Бәхәс» хикәйәһе. Ғ. Хөсәйенов. «Тыуған ил ҡайҙан башлана?». «Ай, Уралым, Уралым!» ҡобайыры. Ғ. Хөсәйенов. «Башҡортостан» хикәйәһе. Ҡ. Даян. « Тыуған ерем минең» шиғыры. Р. Ниғмәти. «Ватан...». Ү.Сирбаев. «Самат олатай ҡайындары», «Ололар һүҙе - аҡыл» хикәйәләре. Башҡорт халыҡ йыры «Урал». Р. Бикбаев. «Өфө - баш ҡала» шиғыры. Б. Рафиҡов. «Ҡурай» хикәйәһе.

Башҡорт халыҡ ижады. Ҡобайыр. Башҡорт халыҡ йырҙарының тарихы, уларҙы башҡарыусылары, танылған ҡурайсылар. Башҡорт халҡының тарихына, билдәле шәхестәргә, башҡорт халыҡ йырҙары тарихына, башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусыларға һәм билдәле ҡурайсыларға ғорурлыҡ, хөрмәт, ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

**7-се бүлек «Донъя халыҡтары әҙәбиәте»**

Э. Хемингуэй. «Ҡарт менән диңгеҙ» (Ғ.Ғиззәтуллина тәржемәһе) повесы (өҙөк). О. Уайльд. «Йондоҙ-малай» әкиәте (Г. Ситдиҡова тәржемәһе). Гримм ҡәрҙәштәр. «Бремен музыканттары» әкиәте (А. Йәғәфәрова тәржемәһе). «Сысҡан балаһы Пик-Пик» һинд әкиәте (З. Бураҡаева тәржемәһе).

Донъя халыҡтары әкиәттәренең үҙенсәлектәре (башҡорт халыҡ әкиәттәре менән сағыштырғанда). «Сысҡан балаһы Пик-Пик» - бер кемдең дә ярҙамһыҙ тормоштоң аҡылына өйрәнгән ҡыйыу һәм аңлы сысҡан тураһында әкиәт. Фекер алышыу өсөн төшөнсәләр: ҡыйыулыҡ, тәүәккәллек, ныҡышмалылыҡ, тапҡырлыҡ, берҙәмлек. «Бремен музыканттары» - Бремен ҡалаһына юлланырға һәм урам музыканттары булырға ҡарар иткән йорт хайуандары тураһында әкиәт. «Йондоҙ малай» һәр кемгә изгелек менән ҡарарға өйрәтә. Башҡаларға ҡарата ихтирам, туғандарға һөйөү тойғоһо тәрбиәләү.

Повесть. «Ҡарт һәм диңгеҙ» повесының мәғәнәһе. Маҡсатҡа ынтылышлылыҡ сифатын тәрбиәләү.

**«Һүрәттәрҙә әкиәт геройҙары» проекты.** Уҡытыусы ярҙамында уҡыусылар төп геройҙары кем, улар ниндәй кешелек сифаттарына эйә икәнен билдәләйҙәр

**4-се класс**

**1-се бүлек «Мәктәбем - тыуған йортом»**

Ф. Рәхимғолова. «Белем байрамы» шиғыры. С. Әлибаев. «Ҡояшлы китап» шиғыры. Ф. Ғөбәйҙуллина. «Мәктәбемә» шиғыры. З. Биишева «Ҡояш нимә ти?»

Шиғыр-монолог, шиғыр-мөрәжәғәт, шиғыр-диалог. Әҫәр тематикаһы, идеяһы. Шиғри әҫәрҙең уйы. Лирик герой. Лирик геройҙың кәйефе, кисерештәре һәм уйҙары. Уҡытыусыға ихтирам, мәктәпкә рәхмәтле булыу. Уҡыу эшмәкәрлегенә мотивация. Шәхси мәғәнәһе.

**2-се бүлек «Дуҫлыҡтың ҡәҙерен бел!»**

М. Ғафури. «Ҡыр ҡаҙы» хикәйәһе. Д. Бүләков. «Яңы дуҫ». Г. Юнысова. «Әсәйем һүҙҙәре». Р. Ғабдрахманов. «Ысын дуҫлыҡ». Р. Байбулатов. «Күгәрсендәр утрауы». Ю. Ильясова. «Сәтләүек-ҡыҙ» әкиәте.

Башҡорт халыҡ яҙыусыһы М. Ғафури. Уның ижад юлы (ҡыҫҡаса мәғлүмәт).

Дуҫлыҡ хаҡында хикәйәләр. Хикәйәләге ваҡиғаларҙың ваҡыты һәм урыны. Исеме, мәғәнәүи өлөштәре, әҫәрҙең идеяһы (ҡабатланыу). Авторҙың, уҡыусының, уҡытыусының әҫәр геройына мөнәсәбәте. Ваҡиғаларҙы, геройҙарҙың ҡылыҡтарын тикшереү һәм баһалау. Герой портретын һүрәтләү. Әҫәрҙең тәрбиәүи әһәмиәте.

**3-сө бүлек «Кешене хеҙмәт биҙәй»**

Р. Ғабдрахманов. «Имән шары» хикәйәһе. Р. Ғабдрахманов. «Капитан». М. Әхмәтшин. «Кәрәҙле бал». Р. Байбулатов. «Сәскәләр мажараһы» хикәйәһе.

Әҫәр авторы. Уның әҫәренең үҙенсәлектәре. Хикәйә темаһы һәм сюжеты, геройҙар (шәхестәр), уларҙың ҡылыҡтары (ҡабатланыу). Художестволы тасуирлау саралары: синонимдар, антонимдар, эпитеттар, метафоралар; уларҙың әһәмиәтен аңлау. Кеше тормошонда хеҙмәттең әһәмиәте.

**«Мәктәбем - тыуған йортом» проект эше.**

**4-се бүлек «Ышаныслы, көслө һәм уңышлы кеше булыу еңелме?»**

Н. Ғәйетбаев. «Аҡбулат батыр» әкиәте. М. Әхмәтшин. «Бер урам малайҙары» хикәйәһе. И. Тимерханов. «Шишмә» шиғыры. С. Латипов. «Еләк ерҙә бишә» хикәйәһе. Л. Яҡшыбаева. «Аҡтырнаҡ».

Художество жанрҙары үҙенсәлектәре (хикәйә, әкиәт). Тематика (идея), төп фекер, сюжет структураһы. Телдең тасуирлау сараларының үҙенсәлеге, сюжеттар төҙөү һ.б. Геройҙарҙың темалары, идеялары, ҡылыҡтары оҡшаш. Авторҙар һөйләүҙәрендә, халыҡ, автор әкиәттәрендә изгелек һәм яуызлыҡ темаһы. Геройҙарҙың ҡылыҡтары әхлаҡ күҙлегенән сығып башҡарыла. Яҙыусыларҙың кешенең шәхси сифаттарын үҫтереү тураһында әҫәрҙәре.

**5-се бүлек «Тыуған ерем минең!»**

А. Игебаев. «Ҡәҙерле тыуған ерем!» шиғыры, «Урал» поэмаһы (өҙөк). Я. Хамматов. «Салауат» романыны (өҙөк). Ф. Иҫәнғолов. «Баҫыуҙағы күл» хикәйәһе. А. Игебаев. «Урал ҡояшы», «Тыуған ерем минең».

Тыуған яҡ тураһында шиғырҙар. Тәбиғәт киңлектәрен, тыуған яҡтың эшһөйәр, рухи яҡтан көслө халыҡтарын данлау. Поэма (шиғриәт), хикәйә художество жанрҙары. Текст төҙөлөшөнөң үҙенсәлектәре. Әҫәрҙәр идеяһының төрлөлөгө. Художество жанрҙарының идея тәрәнлеге, уй-ниәттәре.

**6-сы бүлек «Тыуған илеңдең тарихын бел!»**

М. Кәрим. «Беҙҙең өйҙөң йәме» (өҙөк), «Билдәһеҙ һалдат» повестары. Ф. Аҡбулатова. «Атай икмәге» хикәйәһе. Ф. Туғыҙбаева. «Икмәк» шиғыры.

Художество жанрҙарының күп төрлөлөгө (хикәйә, шиғыр, повесть). Проза һәм шиғри телмәр. Повесть йөкмәткеһенең художество һәм структура үҙенсәлектәре. Повестың мәғәнәле өлөштәре. Ошо художество жанрындағы ваҡиғалар урыны һәм ваҡыты.

**7-се бүлек «Рус һәм сит ил яҙыусыларының әҫәрҙәре»**

А. Пушкин. «Балыҡсы һәм балыҡ тураһында әкиәт» (А. Йәғәфәрова тәржемәһе). А. Чехов. «Аҡмаңлай» хикәйәһе (тәржемәсеһе билдәһеҙ). Бианки В. «Кәкүк балаһы» (тәржемәсеһе билдәһеҙ). С. Михалков. «Китап һөйөүсе». Ш. Перро. Ҡыҙыл ҡалпаҡ» әкиәте (А. Йәғәфәрова тәржемәһе). Гримм ҡәрҙәштәр. «Аҡыллы көтөүсе» әкиәте (тәржемәсеһе билдәһеҙ). «Йәшлек шишмәһе» япон әкиәте (тәржемәсеһе билдәһеҙ). Ә Ванг. «Аҡҡош» хикәйәһе (тәржемәсеһе билдәһеҙ).

Рус классиктарының һәм донъя әҙәбиәтенең әҫәрҙәре. Авторҙар әҫәрҙәренең сюжет үҙенсәлектәре. Әҫәрҙәр идеяларының берҙәмлеге - изгелек яуызлыҡты еңә. Сағыштырыуҙарҙың, кәүҙәләндереүҙең, метафорҙарҙың милли үҙенсәлеге; уларҙың нәфис һүҙҙәге әһәмиәте.

Әҫәр геройы: уның портреты, телмәре, ҡылыҡтары, уй-фекерҙәре. Әҫәрҙең композицион үҙенсәлектәре.

## Телмәр һәм уҡыу эшмәкәрлеге төрҙәре

**Аңлау (тыңлау)**

Милли-мәҙәни ҡиммәттәрҙе, туған (башҡорт) телмәр байлығын сағылдырған художестволы әҫәрҙәрҙе ишетеүгә ҡабул итеү һәм аңлау; ишетеүгә ҡабул ителгән текст буйынса һорауҙарға яуап биреү һәм уның йөкмәткеһе буйынса һорауҙар бирә белеү.

**Уҡыу**

Ҡысҡырып уҡыу. Әкренләп ижекләп уҡыуҙан эстән генә төплө итеп уҡыуға күсеү (уҡыу тиҙлеге тексты аңларға мөмкинлек биргән индивидуаль уҡыу темпына тап килә). Орфоэпик нормаларҙы уҡығанда һаҡау. Текстарҙың төрө һәм тибы буйынса төрлө мәғәнәүи үҙенсәлектәрен интонациялау ярҙамында еткереү.

Уҡыу төрҙәренең үҙенсәлектәре.

Мәғлүмәт текстарын уҡыу: әҫәрҙәргә, бүлеккә тарихи-мәҙәни комментарий

**Һөйләү (һөйләү мәҙәниәте)**

Диалогик һәм монологик телмәр. Уҡылған текстарҙы коллектив фекер алышыуҙа ҡатнашыу, текстҡа таянып, үҙ фекереңде иҫбатлау; башҡорт нәфис әҙәбиәтенең үҙенсәлеген сағылдырыусы фекерҙәр. Һүҙлек запасын тулыландырыу. Ишеткән йәки уҡылған тексты төп һүҙҙәргә, текстҡа иллюстрациялар (тексты ентекле, ҡыҫҡа, һайлап һөйләү).

Уҡыу шарттарында башҡорт телмәр этикеты нигеҙендә ятҡан этикет формаларын һәм этикет аралашыу принциптарының тотороҡло формулаларын һаҡлау.

Уҡыусыларҙың һайлауы буйынса шиғри әҫәрҙәрҙе яттан һөйләү (яттан һөйләү).

**Яҙыу (яҙма телмәр мәҙәниәте)**

Өйрәнелгән әҫәрҙәр проблемаһы буйынса ҙур булмаған яҙма фекерҙәр яҙыу.

Библиографик мәҙәниәт. Тикшереләсәк проблема буйынса китаптар һайлау. Башҡорт мәҙәниәте тураһында мәғлүмәт тупланған йәш үҙенсәлектәренә ярашлы һүҙлектәр һәм энциклопедиялар, Интернет селтәре материалдарын ҡулланыу.

**Балалрҙың укыу даирәһе**

Башҡорт ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәре.Башҡорт халҡының традицияларын һәм ҡиммәттәреен аңлау сығанағы булыу яғынан фольклор.

Тыуған халҡыбыҙҙың милли-мәҙәни ҡиммәттәре һәм традициялары, уны донъяға танытыу үҙенсәлектәрен сағылдырыусы башҡорт әҙәбиәте классиктары әҫәрҙәре – XX бб. һәм хәҙерге заман әҙәбиәте.

Балалар уҡыуының төп темалары: бала саҡ, характерҙың барлыҡҡа килеүе, Тыуған ил, башҡорт халҡының күренекле вәкилдәре (тәүге яҙыусылар, шағирҙар, рәссамдар, полководецтар), башҡорт мәҙәниәте өсөн мөһим байрамдар, балаларҙың фантазиялары һәм хыялдары хаҡында художестволы әҫәрҙәр.

Милли аң өсөн мөһим булған һәм байтаҡ дәүерҙәр дауамында мәҙәни киңлектә һаҡланған әхлаҡи-этик ҡиммәттәрҙе һәм идеалдарҙы сағылдырған (Ватанға һөйөү, иман, ғәҙеллек, намыҫ, шәфҡәтлелек һ.б.) художестволы әҫәрҙәрҙең тексын уҡыу; башҡорт милләтенә хас һыҙаттар (изгелек, эскерһеҙлек, сабырлыҡ, намыҫлылыҡ, ҡыйыулыҡ һ.б.); башҡорт милли традициялары (берҙәмлек, бер-береңә ярҙам итеү, асыҡлыҡ, ҡунаҡсыллыҡ), ғаилә ҡиммәттәре (татыулыҡ, мөхәббәт, бер-береңде аңлау, хәстәрлек, сабырлыҡ, ата-әсәне хөрмәт итеү). Ғаилә мәҙәниәтен, балалыҡ донъяһын сағылдырған башҡорт әҙәбиәтен уҡыу (олоғайыу, тирә-яҡ, ололар һәм тиҫтерҙәр менән мөнәсәбәттәрҙең үҙенсәлектәре; үҙенде башҡорт халыҡ йолаларын дауам итеүсе булараҡ аңлау). Геройҙарҙың ҡылыҡтарына эмоциональ-әхлаҡи баһалау.

Башҡорт әҙәбиәте үҙенсәлектәрен аңлау: геройҙың эске донъяһын, уның кисерештәрен асыу; әхлаҡи проблемаларға мөрәжәғәт итеү. Башҡорт халҡының тәбиғәт донъяһы тураһында шиғри күҙаллауҙары, был

күҙаллауҙарҙың фольклорҙа сағылышы һәм уларҙың шиғриәттә һәм прозала үҫеше. Тирә-яҡ мөхит торошон кешенең хис-тойғолары һәм кәйефе менән сағыштырыу.

**Әҙәбиәтте өйрәнеү пропедевтикаһы (практик үҙләштереү)**

Өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең жанр төрлөлөгө: бәләкәй һәм ҙур фольклор формалары; әҙәби әкиәт; хикәйә, шиғыр, повестан өҙөктәр. Проза һәм шиғри телмәр; художестволы фекерләү; сюжет; тема; әҫәр геройы; портрет; пейзаж; ритм; рифма. Сағыштырыуҙарҙың, кәүҙәләндереүҙең, метафорҙарҙың милли үҙенсәлеге; уларҙың нәфис һүҙҙәге әһәмиәте.

**Уҡыусыларҙың ижади эшмәкәрлеге (өйрәнелгән әҙәби әҫәрҙәр нигеҙендә)**

Уҡыусыларҙың ижади эшмәкәрлегендә әҙәби әҫәрҙе интерпретациялау: ролдәр буйынса уҡыу, инсценировка яһау; коммуникатив бурысты иҫәпкә алып, художестволы әҫәр нигеҙендә үҙҙәренең телдән һәм яҙма тексын булдырыу (төрлө адресаттар өсөн); әҫәргә иллюстрациялар серияһына (рәссамдарҙың һүрәттәренең репродукцияларына таянып).

## «ТУҒАН (БАШҠОРТ) ТЕЛЕНДӘ ӘҘӘБИ УҠЫУ» УҠЫУ ПРЕДМЕТЫН ҮҘЛӘШТЕРЕҮҘЕҢ ПЛАНЛАШТЫРЫЛҒАН ҺӨҘӨМТӘЛӘРЕ

«Туған тел һәм туған телдә әҙәби уҡыу» предмет өлкәһенә ҡараған «Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» предметын өйрәнеү һөҙөмтәләре башланғыс белем биреү буйынса Федераль дәүләт белем биреү стандарттарында бирелгән башланғыс дөйөм белем биреү мәғариф программаһын үҙләштереү һөҙөмтәләренә ҡуйылған талаптарға тап килә.

**Шәхси һөҙөмтәләр**

1-4 кластарҙа «Туған (башҡорт) телдә әҙәби уҡыу» предметын өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусыла түбәндәге шәхси һөҙөмтәләр формалаштырыла:

***гражданлыҡ-патриотик тәрбиә биреү:***

- Ватанға - Рәсәйгә ҡиммәтле мөнәсәбәт булдырыу;

- үҙеңдең этно-мәҙәни һәм Рәсәй гражданлыҡ берҙәмлеген аңлау;

- илебеҙҙең һәм тыуған төбәгебеҙҙең үткәненә, хәҙергеһенә һәм киләсәгенә ҡатнашлыҡ;

- үҙеңдең һәм башҡа халыҡтарға ихтирам;

- кеше тураһында, уның хоҡуҡтары һәм яуаплылығы, хөрмәте һәм кешелек дәрәжәһе, тәртиптең әхлаҡи-этик нормалары һәм шәхес-ара мөнәсәбәттәр ҡағиҙәләре тураһында тәүге төшөнсәләр;

***рухи-әхлаҡи тәрбиә биреү*:**

- һәр кешенең индивидуаллеген таныу;

- ҡайғы менән уртаҡлашыу, хөрмәт итеү һәм изгелек ҡылыу;

- башҡа кешеләргә физик һәм әхлаҡи зыян килтереүгә йүнәлтелгән төрлө тәртип формаларын ҡабул итмәү;

***эстетик тәрбиә биреү:***

- сәнғәттең төрлө төрҙәренә, үҙебеҙҙең һәм башҡа халыҡтарҙың йолаларына һәм ижадына ихтирамлы мөнәсәбәт һәм ҡыҙыҡһыныу;

- төрлө художестволы эшмәкәрлек төрҙәрендә үҙ-үҙеңде күрһәтеүгә ынтылыу;

***физик тәрбиә биреү, һаулыҡ һәм эмоциональ именлек мәҙәниәтен булдырыу:***

- тирә-яҡ мөхиттә сәләмәт һәм хәүефһеҙ (үҙҙәре һәм башҡа кешеләр өсөн) йәшәү рәүеше (шул иҫәптән мәғлүмәти) ҡағиҙәләрен үтәү;

- физик һәм психик һаулыҡҡа һаҡсыл мөнәсәбәт;

***хеҙмәт тәрбиәһе биреү:***

- кеше һәм йәмғиәт тормошонда хеҙмәт ҡиммәттәрен аңлау, яуаплы ҡулланыу һәм хеҙмәт һөҙөмтәләренә һаҡсыл мөнәсәбәт, төрлө хеҙмәт эшмәкәрлеге төрҙәрендә ҡатнашыу күнекмәләре, төрлө һөнәрҙәргә ҡыҙыҡһыныу;

***экологик тәрбиә биреү:***

- тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш;

- уға зыян килтереүҙе ҡабул итмәү;

***ғилми танып белеү ҡиммәттәре:***

- донъяның фәнни картинаһы тураһында тәүге төшөнсәләр;

- танып белеү ҡыҙыҡһыныуҙары, әүҙемлеге, инициативалылығы, ҡыҙыҡһыныусанлығы һәм үҙаллылығы.

**Метапредмет һөҙөмтәләре**

1-4 кластарҙа «Туған (башҡорт) телдә әҙәби уҡыу» уҡыу предметын өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусы универсаль белем биреү сараларына эйә була:

***төп логик ғәмәлдәр:***

- төрлө текстарҙы сағыштырырға, текстарҙы сағыштырыу нигеҙҙәрен билдәләргә, текстарҙың аналогтарын билдәләргә;

- өлөштәрҙән бөтөндө йыйыу (бирелгән үҙенсәлектәре буйынса текстар);

- текстарҙы классификациялау өсөн мөһим билдәне билдәләргә, тәҡдим ителгән текстарҙы классификацияларға;

- текст материалында уҡытыусы тәҡдим иткән күҙәтеү алгоритмы нигеҙендә законлылыҡтарҙы һәм ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы табыу;

- тәҡдим ителгән алгоритмға нигеҙләнеп уҡыу һәм практик бурысты хәл итеү өсөн мәғлүмәттең етешмәүен асыҡларға;

- тексты анализлағанда сәбәп-тикшереү бәйләнештәрен билдәләргә, һығымта яһарға;

***өп тикшеренеү ғәмәлдәре:***

- уҡытыусы ярҙамында маҡсат билдәләргә;

- бурысты хәл итеүҙең бер нисә вариантын сағыштырып, иң ҡулайын һайлап алырға (тәкдим ителгән критерийҙар нигеҙендә);

- тәкдим ителгән планға ярашлы проект эшен башҡарырға;

- текст анализы һөҙөмтәләре нигеҙендә һығымталар төҙөргә һәм уларҙы дәлилдәр менән нығытырға (классификациялау, сағыштырыу, тикшереүҙәр);

Оҡшаш йәки оҡшаш хәлдәрҙә процестарҙың, ваҡиғаларҙың үҫешеү ихтималлығын һәм уларҙың эҙемтәләрен күҙалларға;

***мәғлүмәт менән эшләү:***

- мәғлүмәт алыу сығанағын һайлау: һүҙлек, белешмә;

- күрһәтелгән алгоритмға ярашлы, мәғлүмәтте тәкдим ителгән сығанаҡта (һүҙлектә, белешмәлә) табырға;

- дөрөҫ һәм дөрөҫ булмаған мәғлүмәтте үҙаллы йәки уҡытыусы тәкдим иткән тикшереү ысулы нигеҙендә асыҡларға (һүҙлектәр, белешмәләр ярҙамында);

- Интернет селтәрендә мәғлүмәт эҙләгәндә өлкәндәр (уҡытыусылар, ата-әсәләр/законлы вәкилдәр) ярҙамында мәғлүмәт хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен үтәргә;

- уҡыу бурысына ярашлы текст, видео, график, тауыш, мәғлүмәтте анализларға һәм булдырырға;

- таблица, схема рәүешендә теркәлгән мәғлүмәтте аңларға, текстар менән эш һөҙөмтәләре буйынса схемаларҙы, таблицаларҙы үҙаллы булдырырға кәрәк.

1-4-се кластарҙа «Туған (башҡорт) телдә әҙәби уҡыу» уҡыу предметын өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусы универсаль уҡыу-**коммуникатив** ғәмәлдәргә эйә була:

***аралашыу:***

- фекерҙәрҙе ҡабул итергә һәм формалаштырырға, хис-тойғоларҙы таныш булған мөхиттә аралашыу маҡсаттарына һәм шарттарына ярашлы белдерергә;

- әңгәмәсегә ихтирамлы мөнәсәбәт күрһәтергә, диалог һәм дискуссия алып барыу ҡағиҙәләрен үтәргә;

- төрлө фекерҙәр барлығын танырға;

- үҙ фекереңде әҙәпле һәм нигеҙле әйтергә;

- ҡуйылған бурысҡа ярашлы телмәр әйтеү төҙөргә;

- телдән һәм яҙма текстар (һүрәтләү, фекерләү, хикәйәләү) яҙырға;

- ҙур булмаған асыҡ сығыштар әҙерләргә;

Сығыштың тексына һүрәттәрҙе (һүрәттәрҙе, фотоларҙы, плакаттарҙы) һайларға;

***берлектәге эшмәкәрлек:***

- планлаштырыуҙың тәҡдим ителгән форматы, аралыҡ аҙымдарын һәм ваҡыттарын бүлеү нигеҙендә стандарт (типлы) хәлдә ҡыҫҡа ваҡытлы һәм оҙайлы сроклы маҡсаттар (шәхси) төҙөргә;

- уртаҡ эшмәкәрлектең маҡсатын ҡабул итергә, уға ирешеү буйынса күмәкләп эш алып барырға: ролдәрҙе бүлергә, һөйләшеп килешергә, процесты һәм уртаҡ эштең һөҙөмтәһен тикшерергә;

- етәкселек итергә, йөкләмәләр үтәргә, буйһонорға әҙер булырға;

- эштең үҙ өлөшөн яуаплы башҡарырға;

- дөйөм һөҙөмтәгә индергән өлөшөгөҙҙө баһаларға;

- тәҡдим ителгән өлгөләргә таянып, берлектәге проект эштәрен башҡарырға.

1-4-се кластарҙа «Туған (башҡорт) телдә әҙәби уҡыу» уҡыу предметын өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусы универсаль **уҡыу-көйләү** эшенә эйә була:

*үҙ-үҙен ойоштороу*:

- һөҙөмтә алыу өсөн уҡыу бурысын хәл итеү буйынса эште планлаштырырға;

- һайланған эштәрҙең эҙмә-эҙлелеген билдәләү;

***үҙ аллы контроль:***

- эшмәкәрлектең уңышһыҙ булыу сәбәптәрен асыҡларға;

- телмәр һәм орфография хаталарын еңеп сығыу өсөн уҡыу ғәмәлдәренә төҙәтмәләр индерергә;

- алынған һөҙөмтәне тексты анализлау буйынса ҡуйылған уҡыу бурысы менән тура килтерергә;

- текст менән эшләгәндә ебәрелгән хаталарҙы табырға һәм төҙәтергә.

**Предмет һөҙөмтәләре**

1-4 кластарҙа «Туған (башҡорт) телдә әҙәби уҡыу» уҡыу предметын өйрәнеүҙәр түбәндәгеләр менән тәьмин итә:

- Рәсәй Федерацияһының берҙәм мәҙәни киңлегендә, Рәсәй Федерацияһы халыҡтары әҙәбиәттәре араһында башҡорт әҙәбиәтенең урынын һәм ролен тарихи-мәҙәни, әхлаҡи, эстетик ҡиммәттәрҙе һаҡлауҙа һәм быуындан быуынға тапшырыуҙа аңлау;

- төрлө халыҡтар әҙәбиәтенең үҙ-ара йоғонтоһо, бер-береһен байытыуы, айырыуса мәҙәни, әхлаҡи-этик һәм эстетик киңлек булдырыуҙа башҡорт халҡы фольклорының һәм художестволы әҙәбиәтенең роле тураһында тәүге төшөнсәләр;

- мәғәнәле уҡыуҙы үҙләштереү, әҙәбиәт теорияһының ябай төшөнсәләренең мәғәнәһен һәм мәғәнәһен аңлау (ҡысҡырып уҡыу, үҙең хаҡында уҡыу, художество һәм фольклор әҫәрҙәре жанрҙары, уҡыған әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлау, башҡорт теленең һынлы һәм тасуирлау саралары);

- текста бирелгән мәғлүмәтте ҡабул итеүгә ылыҡтырыу, уҡыусыларҙың эстетик зауығын һәм ҡыҙыҡһыныуын формалаштырыу (танышыу, өйрәнеү, һайланма, эҙләнеү), текст менән эшләү (текстҡа һорауҙар, текст планы), ролдәр буйынса уҡыу, ижади эштәр башҡарыу.

## Кластар буйынса предмет һөҙөмтәләре

## 1-се класс

Уҡыусы түбәндәгеләрҙе өйрәнә:

- ҡысҡырып, йүгереп, аңлы рәүештә (сәғәтенә 25-30 һүҙ) уҡырға;

- художестволы әҫәрҙәрҙең ҙур булмаған текстарын ишетеүгә ҡабул итергә;

- художестволы текстарҙы интерпретациялауҙың элементар алымдары менән ҡулланыу;

- үҙегеҙ һайлаған шиғри әҫәрҙе (5-6 шиғырҙы йәки шиғри әҫәрҙән өҙөктө) яттан һөйләү;

- художестволы әҫәрҙең нимә икәнлеген аңларға;

- художество текстарының жанр айырмалыҡтарын күрһәтергә (элементар кимәл);

- әҫәрҙең төп фекерен аңлау;

- әҙәбиәт теорияһының ябай төшөнсәләренең мәғәнәһен һәм мәғәнәһен билдәләргә: жанр, шиғри әҫәр, юл, дүртенселәр, тема, әкиәт, халыҡ әкиәттәренең төрҙәре, хикәйә, герой (ыңғай, кире), әҫәр авторы;

- әҫәрҙең исемен уның йөкмәткеһе, төп фекере менән сағыштырырға;

- текстарға иллюстрацияларҙы анализларға;

- хикәйәнең мәғәнә өлөштәрен айырып күрһәтергә, абзацтарға бүлеүҙе аңларға;

- әҫәр йөкмәткеһенең төп фекерен асҡан төп һүҙҙәрҙе күрергә;

- әҫәргә һүрәттәргә комментарий бирергә.

## 2-се класс

Уҡыусы түбәндәгеләрҙе өйрәнә:

- текстың йөкмәткеһен тыңларға һәм ҡабул итергә;

- минутына 50-60 һүҙ тиҙлек менән уҡырға;

- ҡысҡырып һәм үҙеңдән-үҙең дөрөҫ, йүгереп, аңлы рәүештә һәм мәғәнәле итеп уҡырға;

- әҙәбиәт теорияһының иң ябай төшөнсәләрен һәм мәғәнәһен аңларға: бәләкәй фольклор жанрҙары, бишек йыры, таҡмаҡ, халыҡ уйыны, сюжет һыҙығы, рифма, ритм, геройҙың портреты;

- элементар алымдарға нигеҙләнеп, художестволы һәм уҡыу текстарын интерпретациялау;

- текстарға таянып, геройҙарҙың ҡылыҡтарын тикшерергә;

- әҫәр геройҙарының ҡайғыһын уртаҡлашырға;

- уҡығанды әхлаҡи яҡтан тәрбиәләү, геройҙарҙың ҡылыҡтарын әхлаҡи нормалар менән сағыштырырға;

- милли-үҙенсәлекле тасуирламалар тексында (уҡытыусы етәкселегендә) айырырға;

- әҙәби геройҙар миҫалында сәләмәт йәшәү рәүешенең файҙаһын аңларға;

- башҡорт телендә диалог алып барырға (уҡылған текстар буйынса фекер алышырға), әңгәмәсене тыңларға һәм ишетергә, башҡаса фекер йөрөтөргә;

- фольклорҙың кескәй жанрҙарын (таҡмаҡтар, бишек йырҙары, халыҡ уйындары текстары), әҙәби жанрҙарҙы (хикәйә, әкиәт);

- текстың мәғәнәүи өлөштәренең микротемаларын билдәләргә;

- тексты ҡабаттан һөйләү планын төҙөргә, тексты яңынан һөйләргә;

Текстарҙа тасуирлау тел сараһын - тасуирламаны табырға; милли үҙенсәлекле һүрәтләмәләрҙе айырып күрһәтергә.

**3-сө класс**

Уҡыусы түбәндәгеләрҙе өйрәнә:

- текстың йөкмәткеһен тыңларға һәм ҡабул итергә;

- минутына 60-70 һүҙ тиҙлеге менән уҡырға (динамик уҡыу);

- әҙәбиәт теорияһының иң ябай төшөнсәләренең мәғәнәһен һәм мәғәнәһен аңларға: башҡорт халыҡ ижады, башҡорт халыҡ йыры, ҡобайыр; башҡорт теленең идеяһы, пейзажы, һынлы сәнғәт саралары (сағыштырыу, кәүҙәләндереү);

- художестволы һәм уҡытыу текстарын интерпретациялау (төп һүҙҙәр эҙләү, идея-тематик һыҙатты асыҡлау, мотивтарҙы асыҡлау, авторҙың фекерен аңлау һәм уҡыусы позицияһын билдәләү);

- геройҙарҙың ҡылыҡтарын тикшереү, уларҙы баһалау;

- хикәйәләрҙең сюжет һыҙаттарын айырып күрһәтергә;

- авторлыҡ позицияһын аңлау;

- тексты телдән өҙөмтә итеп килтерергә;

- башҡорт халыҡ йырының һыҙаттарын билдәләргә; башҡорт халыҡ йырҙарының, уларҙы башҡарыусыларҙың, билдәле ҡурайсыларҙың тарихын белергә;

- әҙәби әкиәттең үҙенсәлектәрен, уның халыҡ әкиәттәренән айырмалы булыуын аңларға;

